**Рус мәктәптәре өсөн башҡорт (дәүләт) теленән олимпиада һорауҙары(10 класс)**

1. Башҡорт телендә нисә һуҙынҡы хәреф бар? Яҙығыҙ.

2.Яңғыҙлыҡ исемдәргә миҫалдар килтерегеҙ.

3.Һүҙҙәр янына сифаттар өҫтәп яҙығыҙ.

*Тау,ялан,егет,мәктәп,әсәй,уҡытыусы.*

4. Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр өҫтәп яҙығыҙ.

*Тәбиғәтте һаҡлау-бөтә кешенең бурысы. Ошо маҡсатта урм…нд…рҙы иҫәпһеҙ ки…еү , й…лғ…ларҙа һәм к..лдәрҙә балыҡ тотоу, урм..ндарҙа ҡош-ҡортҡа һәм к..йеккә һунар итеү тыйыла. Йәш а..астар ултыртыу өсөн саралар күреү- кешеләрҙең бурысы. Быйндай эшт..рҙә уҡыусылар ҙа ҡатнашырға тейеш. (Н.Мусиндан)*

5. Мәҡәлдәрҙең икенсе яртыһын яҙып бөтөгөҙ.

*Кем эшләмәй,…*

*Белеме барҙың…*

*Уйнап һөйләһәң дә,…*

6.М.Кәримдең ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ.Исемдәрен яҙығыҙ.

7.Һорауҙарға яуап яҙығыҙ.

Башҡортостандағы иң бейек тауҙың исеме-

Башҡортостандағы иң ҙур күл-

“Янғантау “ шифаханаһы ҡайҙа уранлашҡан?

М.Кәрим ниндәй районда тыуған?

8. “Ҡыш” миҙгеле тураһында 5 һөйләм яҙығыҙ.

9. Яҙыусы һәм шағирҙарҙың берәй әҫәренең исемен яҙығыҙ.

М.Кәрим,Р.Ғарипов,З.Биишева

10.2012 йылдың 2 февралендә ҡайһы шағирҙың тыуған көнө? Нисә йәш?

**Тәржемә өсөн текст.**

**Янғантау.**

Республикабыҙҙың Салауат районында Янғантау шифаханаһы урынлашҡан.

Унда ер аҫтынан бер туҡтауһыҙ эҫе пар һәм газ сығып ята.Тау 200 йылдан ашыу ғалимдарҙың иғтибарын йәлеп итә, әле лә уның сере асылып бөтмәгән.

Янғантау шифаханаһында быуын ауырыуҙарын дауалайҙар.Тау янында Ҡорғаҙаҡ йылғаһы аға. Был шишмә ҡыш көнө лә туңмай. Ундағы һыуҙың температураһы йыл әйләнәһендә 16-18 градус була. Һыуы шифалы: ашҡаҙан,эсәк һәм бөйөр ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланыла.